*Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ,*
*Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты,*
*журналист*

# ЯҘМЫШ ҠӘЛӘМДӘРЕН ҠУЛҒА АЛЫП



## *Документаль повесть**

Ябалаҡлап эре бөртөклө ҡар яуа. Ҡасҡындар лагерҙан сыҡҡас та алыҫтан уратып көнбайышҡа табан юл алды. Шулай ышаныслыраҡ ине. Көнсығыш йүнәлеште айҡауҙары ихтимал. Урман сите. Сәсеп үҫтерелгән һәм буй еткереп килгән ҡарағайҙар. Ошонда бер-береһенән алыҫтараҡ, шул ҡарағайҙар аҫтына боҫоп көн үткәрергә булды улар. Лапылдатып яуған ҡар уларҙың эҙҙәрен дә, үҙҙәрен дә тиҙ күмде. Көн әллә ни һыуыҡ та түгел һымаҡ, әммә һалҡын үҙенекен итә икән. Ҡалтырата, ҡыбырлап йөрөп булмай. Немец күҙенә эләкмәйем тиһәң, ултыраһың инде шыҡырайып.

Сабиттың хәйерле юл теләүен аңлай алмай Сәйфулла. Шаяртыуы ғынамы, әллә уға һәм немецтарға төркөмдөң ҡасырға әҙерләнеүе билдәле инеме. Белһәләр, нисек сығарып атманылар йәки башҡа лагерға ебәрмәнеләр? Әллә Сабиттың, үҙе генә һиҙенеп, иҫкәртеүе шул инеме? Ә ниңә иҫкәртергә тейеш әле ул? Бынан иҫән-аман юғалыусылар булмай, эт менән юллатып барыбер тоталар. Лагерҙан сыҡҡас эләкһәгеҙ, ауылдаш ҡустым, миңә үпкәләмә, тигән һүҙе шулмы?

Ҡасҡындарҙың бөтөнөһөн дә танып бөтөрә алманы Сәйфулла. Ете кеше булырға тейеш тиҙәр ине. Бәҙрәфтән сығып, ҡапыл бер әсир ярыҡҡа тығылды. Кем ул? Дуҫмы, һатлыҡ йәнме? Сәйфулла үҙе һигеҙенсе булып сыҡты. Юлда иҫәпләп, барлап алырға форсат булманы. Бер-береһенең эҙенән баҫып тигәндәй, төн буйына хәлдәре бөткәнсе йүгерҙеләр. Лагерҙан тиҙерәк алыҫлашырға, фашистар уны-быны һиҙеп шау-шыу күтәргәнсе, эттәр менән эҙгә төшкәнсе алыҫыраҡ китеп ҡалырға кәрәк ине.

Көн шулай уҡ билдәһеҙлектә үтте. Сәйфуллаға ул көн бик шөкәтһеҙ, ҡырыҫ күренде. Мул итеп ҡар яуып тороуы бер яҡтан яҡшы. Ошоғаса эҙләп килеп етмәгәндәр икән, буранға рәхмәт әйтергә кәрәк. Ҡар башына ҡар етә, тиҙәр бит. Таң атыуға ул туҡтап, ҡояш күтәрелеүгә шаулап гөрләүектәр аға башлауы мөмкин. Көн йылыныр, яҙ үҙенекен итер әле. Хәрәкәттә булһаҡ, төнгө һалҡынға ла бирешмәбеҙ, тип уйлай.

Ғүмеренең ҡыл өҫтөндә икәнлеген белеп, тормошҡа теше- тырнағы менән йәбешеп йәшәгән был көндәрҙә ауыл яғы онотолоп торҙо. Әммә бөтөнләй үк түгел. Иҫтән сығамы һуң һөйгән йәр? Оҙон-оҙаҡ итеп хыялланырға, йәшлек иҫтәлек-

*Аҙағы. Башы 2-се һанда.

тәре менән ләззәтләнергә форсаты ғына булманы. Инде барыһын күҙ алдына баҫтырып, уй диңгеҙенә ҡойона ғына башлаһаң, йә теге, йә был сәбәп килеп сығып, зиһенеңде икенсегә бора, йәки көн буйына арып-талып йөрөгән тән йоҡоға сума. Уйҙар төштә лә дауам итә ҡайһы саҡ. Ләкин оҙаҡҡа түгел һәм тиҙ онотола.

Шыҡырайып ҡарағай төбөндә ултырған Сәйфуллаға был йәһәттән бөгөн хөрриәт. Ҡар күмеп китте. Баҡтиһәң, ҡар аҫты йылы икән. Һәр хәлдә, асыҡ һауала ултырған һымаҡ түгел. Ел бәрелмәй. Иғтибарҙы алырлыҡ тауыштар ҙа юҡ.

Фазиланы ул уйын яһайбыҙ тип мәктәп аҫҡысын һорарға килгән йәштәр араһында күрҙе тәү тапҡыр. Тиҫтерҙәренән ҡалҡыуыраҡ буйлы был сибәркәй шунда уҡ Сәйфулланың йөрәген өҙҙө лә ҡуйҙы. Мәктәпте асып биреп, фатирына ҡайтып китһә лә, эшкә ҡулы барманы. Мәктәп тартты ла торҙо. Йәштәр берәй эш боҙор тип ҡурҡырлыҡ нәмәһе лә юҡ һымаҡ. Араларында өйләнешеп колхозда эшләп йөрөүсе бер-ике ғаилә бар. Уларға ышанырға була — тәртипһеҙлеккә юл ҡуймаҫтар әле. Шулай ҙа йөрәк урынында түгел. Аяҡтар ауыл уртаһындағы тимер башлы йортҡа атларға әҙер.

Түҙмәне — барҙы. Йәштәр уны көсләшеп бейергә төшөргәс, бер-ике әйләнде лә баяғы ҡыҙға барып баҫты. Ҡыҙ ыҡ-мыҡ итеп торманы, еңел генә күтәрелеп, таҡмаҡ ыңғайына тыпырларға керешә лә ултырырға самалаған Сәйфулланы беләгенән эләктереп, үҙе менән ҡуша әйләнергә саҡырҙы. Сәйфулла, шуны ғына көткәндәй, ҡыҙҙы еңелсә ҡосаҡлап, бейеүен дауам итте.

Мәктәпте биклап сыҡҡас, ауылдың Сәйфулла йәшәгән яҡ осона ҡайтыусы йәштәр байтаҡ ҡына булып сыҡты. Төнгө һауа бик үк һалҡын булмаһа ла, Сәйфулла пинжәген сисеп:

— Һалҡын тейҙереп ҡуйма, һеңлем, күп бейенең, тирләгәнһеңдер, — тип Фазиланың яурынына һалды.

Ҡыҙ өйҙәре тәңгәленә еткәс инеп китергә туҡталғайны, Сәйфулла пинжәген алырға ашыҡманы. Был икәүҙең уйын белгәндәй, йәштәр, һаубуллашып, өйҙәренә таралыштылар. Сәйфулла, һүҙ юҡта һүҙ булһын тигәндәй, ҡыҙҙан уның кем булыуы, ҡайҙа эшләүе тураһында һорашырға керешә.

— Эшләмәйем әле мин. Уҡыусы ғына, — тип көлдө үҙен «Фазила» тип таныштырған был ҡыҙ.

— Күргәнем юҡ ине, ситтә уҡыйһыңдыр, ахыры?

— Ситтә тип ни, әллә ни алыҫ та түгел. Күрше ауылда. Мөслим мәктәбендә.

— Нисәнсе синыфта?

— Етенселә. Атайым үлгәс, ике йыл өйөлөп торҙом.

— Атайың юҡмы ни?

— Әсәйем менән генә йәшәйем. Ул да өлкән инде. Үҙе сырхау ғына. Уҡымам тигәйнем дә, әсәйем ике йыл буйы ҡолаҡ итемде ашаны. Мин иҫән саҡта уҡып ҡал, тип нығышты. Быйыл һүҙен тыңламай булдыра алманым. Колхоз ҡыш сығырлыҡ ашлыҡ бирҙе. Мөмкинселек булғанда ниңә уҡымаҫҡа ти? Белем артыҡ булмаҫ әле.

Шулай танышты улар. Сәйфулла үҙенең Ғафури районынан булыуын, атаһы юҡлығын, педтехникумды тамамлағас ошо районға эшкә ебәрелеүен, әлегә мәктәптәге бөтә балаларҙы ла танып етмәүен ҡыҙыҡ итеп һөйләп алды.

Фазила менән Сәйфулла уҡыу йылын бер-береһен юҡһынып, һәр осрашыуҙарына шатланып үткәрҙе. Бер ҡабынған ут уларҙы көндән-көн нығыраҡ солғай барҙы. Фазила ҡыш башланғас Мөслимдә фатирға инеп ҡараһа ла, унда йәшәмәне тиерлек. Һыуыҡ тимәй, буран тимәй, йүгерә-атлай ҡайта ла инә. Көн боҙолған мәлдәрҙә Сәйфулла уны ҡаршы барып ала, киткәнендә оҙатып ҡуя. Колхоздан ат һорап алғылай. Колхоз рәйесе лә, бригадир ҙа, ат ҡараусылар уға иң шәп юртаҡты кашауай егеп, аҫтына йомшаҡ бесән һалып бирер булып китте.

Йәй етеп, уҡыуҙар тамамланғас, Теләшкә барып никах ҡағыҙы алғас, йәйге каникулды Сәйфулланың тыуған ауылында үткәрҙе улар. Килен ҡәйнә буҫағынан төшә тигәндәй, Фазила иренең туғандарына бик хуш килде...

* * *

— Ну, Мәжитов, туңманыңмы әле? Әйҙә, тор, тамаҡ ялғап алайыҡ.

Урман төпкөлөнә инеп, бер ҡарағай төбөнә сүгәләнеләр. Барыһы ла бар: Ғәлиев та, Хәбибуллин да, Алим да, Мәхиәнов та, Ибраев та, Ермаков та. Ә бына һигеҙенсе кеше кем? Алим да, Мәхиәнов та күҙ ҡарашы менән шул һорауҙы бирҙе. Сәйфулла яурынын һелкетте лә таныш булмаған ҡасҡынға тура ҡарап:

— Һеҙ кем, иптәш? — тигән һорау бирҙе. Тегеһе фамилияһын әйтте. Сәлимов тинеме, Ғәлимов тинеме, Сәйфулла уны йүнләп ишетмәне. Тик, төпсөнә торғас, уның Ҡазандан икәнлеген белделәр.

Алим ашхананан бысаҡ алып сыҡҡан икән. Ул һәр кешегә тигеҙ итеп икмәк, сусҡа майы телгеләне. Стакан алырға ла онотмаған. Тауышланмай, күберәк ым-ишара менән генә аңлашып, баш бармаҡтарын күтәреп, бер-береһен тәбрикләп, тиҙ генә ашап алдылар.

— Ну, ребята, с богом, в путь, — тине Яков-Яҡуп.

Бер-бер артлы теҙелеп, ниндәйҙер бәләкәй генә ҡаласыҡты көнбайыштан төнъяҡҡа табан урап үткәндән һуң, Яҡуп, тура мөйөш яһап, көнсығышҡа табан боролдо. Атлауы нисектер күңеллерәк, еңелерәк булып китте шикелле. Ни тиһәң дә, тыуған илгә, һөйөклө Ватандарына ҡарай атлайҙар бит!

* * *

Седлице местечкоһын үтеп биш көн тигәндә, ҡасҡындар Буг йылғаһы ярына килеп төртөлдө. Берберeһенән күҙ күреме ергә таралышып, йылғаның арғы ярын күҙәтә башланылар. Дошман һалдаттары йөрөп тора.

Иң иттә ятҡан Яҡуп, яҡында ғына утар күреп, унда барған. Поляк ҡарты ғына йәшәй икән утарҙа. «Төҙөк кәмәләрҙе немецтар алып бөттө. Бер тишек кәмә бар ҙа, уның менән сыға алмаҫһығыҙ», —тигән ҡарт. Шунда ултырған телефон бағаналарының береһен бысып алырға бысҡы биргән. Эшегеҙ бөткәс, һыуға ташлап китерһегеҙ, тигән. Ҡасҡындар, күлдәктәрен йыртып, кәмәнең тишектәренә тыҡҡас, шинель-итектәрен һалып, үҙҙәре икегә бүленеп, йылғаға төшөп китә. Йылғала боҙҙар аға. Һыуыҡ. Аяҡ-ҡулдарығыҙ ҡороша башлаһа ҡаҙарһығыҙ тип, ҡарт һәр береһенә энә, булавкалар ҙа бирҙе. Ҡасҡындар таң һарыһында ғына йылғаны аша сығып етә алды. Бәхеткә күрә, немец һалдаттарының тәрән йоҡоға талған сағы була был.

* * *

Ер ҡарҙан әрселеп бөттө тиерлек. Боҙҙар ҡояш нуры үтә алмаған ҡалын урмандарҙа ғына ҡалды. Ағасы һирәгерәк урындарҙа имән сәтләүеге осрай. Сәтләүекте ҡасҡындарҙың төп ризығы тиһәк тә хата булмаҫ. Һыуҙа ятып бүртә башлағандары сәйнәүгә еңелерәк. Ризыҡ түгел инде ул, әлбиттә. Ашҡаҙанды өйкәй. Ашайһың инде, ҡайҙа бараһың. Бөтөнләй тәғәм ризыҡ ҡапмай йөрөгәндәй түгел.

Үлән ҡалҡа башлағас, ҡасҡындар төрлөһөн йолҡоп, сәйнәп ҡараны. Улар йыуа, әтнек, һарына кеүек ашарға яраҡлы үҫемлек эҙләй. Тапмайҙар, күрәһең, был яҡтарҙың үҫемлектәр донъяһы башҡасараҡтыр. Әллә танымайҙар инде. Был яҡ халҡы ризыҡ иткән үҫемлектәрҙе белеп тә еткермәйҙер. Ҡуҙғалаҡ әле сыҡмаған. Үҫәлерме, юҡтырмы — уныһын да белмәйҙәр. Шулай ҙа, һәр япраҡты өҙөп, сәйнәп ҡарайҙар. Ҡайын һыуын эсергә өйрәнеп алдылар. Ағас олонона бысаҡ менән ыра яһайҙар ҙа төбөнә ултырып, шул яраны имәләр. Тәмле. Нисектер йөрәккә ял биргәндәй.

Ауылдан ситтәрәк ятҡан картуф баҫыуҙарында соҡоналар. Табыш бик аҙ. Ҡаҙылмай ҡалған оя тапһалар, байрам була. Ләкин иртәрәк асылған баҡсаның картуфы йомшарып, серей башлаған була инде.

Ауылға инеп ризыҡ һорап алыу хәүефле. Немец йәшәмәгән, дошмандың комендатураһы урынлашмаған ауыл юҡ тиерлек. Шулай ҙа, сиратлап ауылға төшөп әйләнәләр. Ҡалғандар алыҫтан ғына күҙәтеп, көтөп ала. Тәүәккәлләгән ҡасҡындың бай ғына ҡайтҡан саҡтары ла

булғылай. Кем өйөнә инәһең бит. Күптәрҙең үҙ балаһына тотторорлоҡ бер һыныҡ икмәге булмай. Йә немецтарҙың атып китеүенән ҡурҡып, ишек асмайҙар.

Ҡасҡындар бер-береһенән әллә ни алыҫ үҫмәгән ҡыуаҡ төптәренә таралып урынлашты. Алда күренгән ауыл ҙур ғына. Бер башы ҡалын ҡара урманға терәлеп тигәндәй ята. Был яҡ осонда киң ялан.

— Беловеж урманы башлана, — ти Яҡуп. — Йөҙәр, меңәр саҡырымдарға һуҙыла ул. Үсемлектәргә лә, хайуандарға ла бик бай. Хатта донъяның башҡа өлөшөндә осрамай торған, зубр тип аталған эре хайуандар ҙа йәшәй. Һүрәтен күргәнегеҙ барҙыр? «Зубровка» тигән араҡы шешәһенә йәбештерелгән ҡағыҙҙа була. Бик көслө хайуан тиҙәр. Беловеж урманы араһы һаҙ. Юл таба алһаҡ, дошман күҙенә эләкмәй генә атлай алырбыҙ тип уйлайым.

Ауылды ошо башынан киҫеп, арҡыры сығырға булдылар. Сөнки был яғынан атларлыҡ түгел ине — һаҙ. Урман ситенә барһаң, оҙон ауылдың теге башына немецтарға күренмәй сығып етермен тип уйлама ла.

Ауылды төндә киҫергә кәрәк. Боҫоп ултыра торғас, өҫтәге еүеш кейем ҡата башланы. Көн һалҡын. Ҡалтырата. Башҡалар түҙерлек булһа ла, Ғәлиевтың хәле шәптән түгел. Яралы аяғын саҡ һөйрәп атлай. Яҡуп уның яраһына төрлө япраҡ ябып, ҡайыры менән талыҡлап ебәрһә лә, япраҡтарҙың шифаһы һиҙелмәй.

Төн етте. Төркөм икегә бүленде. Тәүгеһендә Яҡуп, Алим, Сәйфулла һәм Ҡазан егете. Улар туҡтап тормай, йәһәт-йәһәт атлап, урамды үтергә тейеш. Икенсе төркөмгә рисыҡ табыу бурысы йөкмәтелде.

Сәйфуллалар, урамды киҫеп, картуф баҡсаһын үтергә лә өлгөрмәне, ҡапыл бөтөн тирә-йүнде яҡтыртып, һауала ракета ҡабынды. Барыһы ла ергә һыйынды. Дошман бер-бер артлы һауаға ракета ебәреүен дауам итте. Шул тиклем яҡты, ергә энә төшһә, эйелеп алырлыҡ. Ҡасҡындар тын да алмай ята. Ҡуҙғалырға, үҙеңдең ҡайҙалығыңды күрһәтергә ярамай. Ауыл ситтәрен прожектор уты һәрмәй.

Ракеталар атыу баҫыла төштө. Прожектор урам буйын ҡапшаған арала Яҡуп:

— Егеттәр, шыуышабыҙ. Аяҡҡа баҫыусы булмаһын, — тине.

Тубыҡтар менән хәрәкәт итеп, тигеҙһеҙ тупраҡҡа йәбешә-йәбешә ҡасҡындар алға шыуа. Ракеталар атылып, тирә-йүнде балҡытыр мәлдә барыһы ла, ниндәй хәлдә булһа, шул көйө ҡатып ҡала. Урманға яҡынлаша барған һайын түңгәктәр күбәйҙе. Һаҙлы ерҙәрҙә була торған балсыҡ түңгәктәр. Улар араһына еткәс һәр кем ҡотолдоҡ тип ышанғандыр. Ысынлап та, ҡапылда кеше күҙенә бәрелеп бармайҙар. Һаҡсы манараһынан яуҙырылған пулялар ҙа бында килеп етмәй.

Урманға инеп, йөҙ-йөҙ илле аҙым атлағас, туҡтап артта ҡалған иптәштәрен көтөп алырға булдылар. Яҡуп, ғәҙәтенсә, ҡош булып һыҙғыра-һыҙғыра ултыра. Бына Хәбибуллиндың да яуабы ишетелде. Барыһы ла иҫәнме икән? Тыныс ҡына ятҡан ауылда нилектән шау-шыу ҡупты һуң әле? Көтөп алдылар. Иң тәүҙә Хәбибуллин килеп етте, унан — ҡалғандары. Иң һуңғы булып Ғәлиев килеп ауҙы.

— Бәләгә тарыныҡ бит, — тине Хәбибуллин, ауылда булған ваҡиғаларҙы һөйләргә әҙерләнеп. — Тәҙрәһенән нур бөркөлөп торған бер өйҙөң ишеген асып ебәрһәк, унда туп-тулы полицайҙар. Эсәләрме, кәңәшмә үткәрәләрме — бергә йыйылғандар. Ишекте ҡапыл яптым да иптәштәргә ҡасығыҙ тип команда бирҙем. Тырым-тырағай төрлөбөҙ төрлө яҡҡа һибелдек. Полицайҙар сығып ракета ата башланы, тревога ҡупты. Алдан һөйләшеү буйынса, өйҙәр ышығына боҫабоҫа бер һарай артына йыйылдыҡ. Көс-хәл менән бына һеҙҙе килеп таптыҡ.

Был төнгө ваҡиға ҡасҡындарға артабан һағыраҡ булырға һабаҡ бирҙе. Ярай әле иҫән-аман ҡотолдолар.

Бында оҙаҡ ҡалырға ярамай ине. Кемдең күпме хәле бар, ҡасырға, йүгерергә кәрәк. Ғәлиевты ике яҡлап ҡултыҡлап алдылар.

* * *

Апрель үҙенекен итә. Көндөҙ еүеш шинелдән боҫ күтәрелһә лә, төндәрҙә ул ҡата. Сикәнес. Өшөтә. Бигерәк тә етеҙ атлап килеп туҡтап ҡалһаң, тирләп килгән тән һалҡынды ныҡ һиҙә. БыҒаса төндәрҙә генә атларға тырышһалар, хәҙер инде, ҡалын урманға ингәс, көндөҙ ҙә туҡтамаҫҡа ҡарар иттеләр. Ошоғаса Алимдың кеҫәһендә йөрөгән компас бик кәрәкле эш ҡоралына әйләнде. Һис бер нәмәнән ҡурҡмай әкрен генә атлайҙар. Урмандың осоҡырыйы күренмәй. Ауылдар юҡ. Ашарға имән сәтләүегенән башҡа нәмә табып булмай. Ҡасҡындар тамам хәлһеҙләнде. Яңаҡтары, күҙҙәре эскә батып, ҡаҡ һөйәккә ҡалды. Һаҡал-мыйыҡ баҫҡан йөҙҙәренә ҡараһаң, был ниндәй урман ҡараҫҡыһы, тип ҡотоң осор. Арыҡ кәүҙәләрен ташлап китергә өлгөрмәгән йәндәре һәм мәңге һүнмәҫ өмөт осҡоно ғына уларҙы алға әйҙәй.

Сәйфулланың ҡыл өҙөрлөк тә хәле ҡалмағайны. Өҫтөндәге шинелен сисеп түшәне лә өҫтөнә ауҙы һәм яғаһының ауыҙына эләккән мөйөшөн сәйнәргә тотондо. Йөндән иләнгән буҫтау ризыҡ була алмаһа ла сәйнәй. Шул хәлдә бер аҙ ятҡас, күҙен асып иптәштәрен күрмәксе булып ҡараһа, яҡында ғына ағас ботағында эленеп торған аҡ әйберҙе абайланы. Тороп атларлыҡ көсө юҡ ине. Шыуышып-шыуышып барып төйөнсөктө көскә-көскә ҡулына алды. Сепрәккә төрөлгән көлсә булып сыҡты ул. Берәй урмансы онотоп ҡалдырғандыр. Ҡырмыҫҡалар тишеп, селтәрләп бөткән. Ләкин табыш унда өмөт саҡҡыларын яңынан уятты. Иптәштәренә тауыш биреп, үҙ эргәһенә саҡырҙы. Улар килеүгә көлсәне һигеҙ өлөшкә бүлеп ҡуйғайны.

Ашағас, бер аҙ ятып алдылар.

— Сәйфулла һәйбәт ҡунаҡ итте, — тип күңелһеҙ генә шаяртырға тырышты Яҡуп иптәштәрен. — Тамағығыҙ туйҙы, башығыҙҙы юғары тотоғоҙ, бара алғансы атлап ҡарайыҡ.

Ҡуҙғалдылар. Юлдан алыҫ түгелдәр икән. Туҡтап күҙәтергә булдылар. Ашыҡмауҙың да файҙаһы була бит. Күп тә үтмәй, өс ат егеп, ҙур арбаға тейәлгән полицайҙар күренде. Берәүҙәре ултырған, икенселәре аяғүрә баҫып килә. Дилбегәсе аттарҙы йән-фарманға ҡыуа, ҡурҡҡанға ҡуш күренәме, шатырлатып юлдың ике яғына ла автоматтан аталар. Тимәк, яҡын- тирәлә ауыл булырға тейеш.

Полицайҙар үткәс тә ҡасҡындар ашыҡманы. Юлды күҙәтеп ята бирҙеләр. Башҡа үткенсе булмағас, Яҡуп:

— Тәүәккәлләйек, егеттәр. Хәрәкәттә — бәрәкәт. Тик ятыуҙан эш сыҡмаҫ, — тип ҡалҡынды.

Оҙаҡ барырға тура килмәне. Ғәлиев ағас араһында барак һымаҡ йорт барлығын шәйләп ҡалды. Боролорға булдылар. Таҡта ярыу урыны икән. Йыуан-йыуан бүрәнә өйөмдәре ята. Таҡта бысыу өсөн эшләнгән кузлаларға бүрәнә һалынған. Әҙер таҡта өйөмөнән ҡарағай сайыры еҫе аңҡый. Бысҡысылар күренмәй. Шулай ҙа барак тирәһенә бармаҫҡа булдылар.

Юл ырамай. Көн буйына дүртбиш километрҙан ары атлай алмайҙарҙыр. Сәйфулла шинель яғаһын ҡайырып ауыҙына ҡапҡан. Сәйнәп ҡарай, ләкин бер ниндәй тәм дә, һут та юҡ. Яға ауыҙҙа өҙөлөп ҡала. Ни эшләһен, уны тел менән әйләндереп ҡарай, йоторға ҡурҡа. Төкөрә лә ҡабат сәйнәй башлай.

Юл ҙур ғына ҡасабаға алып барҙы. Ҡасаба уйпатта ултыра. Бөтә яғынан да урман терәлеп тора. Барып туҡтаған урында Ҡазан егете ергә һуҙылды лы ятты. Аҙыраҡ атлай бирәйек, тип ҡуҙғатып ҡараһалар ҙа торманы. Һөйләшеүенең рәте юҡ, теле көрмәлә, нимә әйткәнен дә аңлап булмай.

— Бә... хил бу...

— Если тебя найдут, скажешь, что был один, — тине уға әйелеп Алим.

Хәбибуллин Алимдың һүҙҙәрен татарса ҡабатланы. Егет аңланы булһа кәрәк.

Иптәште ҡалдырып китеү ауыр. Ни эшләмәк кәрәк. Барыһы ла бер яҙмышҡа дусар ителгәндер инде. Бында Ҡазан егете ятып ҡалды, ике-өс километрҙан, бәлки, тағы кемгәлер сират етер, унан өсөнсөһөнә... Рухи һәм физик көслөләр

генә мәғәнәһеҙ йән биреүҙән ҡотолоп ҡала алыр.

Ҡасабаны урап үтеү уйы менән унға боролдолар. Бәй, ни күҙҙәре менән күрһендәр, ҡабат баяғы таҡта ярыу заводы ихатаһына килеп ингәндәр. Абайлап ҡалғас, бысҡы табы өйөмөнә ышыҡланып ҡаранылар. Зиһендә ныҡ ултырған һаҡсыллыҡ күреү сараһы уларҙы бик бейек булмаған ҡоймаға үрмәләтте. Ихата яғынан ҡойма тәпәш күренһә лә, бейек кенә икән. Сәйфулла ҡаҡ ергә һеңк итеп барып төштө лә ауыртынып ҡуҙғала алмай ятты. Әмәлгә баҡҡандай, мейеһе шул тиклем саф — тот та шиғыр яҙ.

— Мазитов, — тине Алим тауышы. — Тут рядом ручей, выпей воды.

Сәйфулла, бөтә көсөн йыйып, ыңғыраша-ыңғыраша аҫҡараҡ тәгәрәне. Йылға, ысынлап та, бик яҡын ғына икән. Ҡулы менән һәрмәнеп һыуҙы тапҡас, тырыша-тырмаша йөҙтүбән әйләнде лә ирендәрен һыуға тейгеҙҙе. Йотлоғоп эсте ул. Саф шишмә һыуы тәненә еңеллек биргәндәй булды. Ауыҙын һыуҙан алып ята бирҙе лә, хәл алғас, тағы йылғаға ҡапланды. «Артыҡ күп эсмә», — тип иҫкәртеп тора һәр ваҡыт уға зиһене.

Кем нисек ятһа, шулай йоҡлап киткән. Өшөп уяндылар.

Төн үтеп бара. Быны барыһы ла аңлай. Заводта эш башланғансы был тирәнән алыҫлашып ҡалырға кәрәк. Ҡуҙғалдылар. Таң яҡтыһында хәҙер инде йүнәлеште дөрөҫ алып атларға мөмкин.

Ҡояш йылыһын тән менән һиҙә башлағансы юлды күҙәттеләр. Ат менән дә, йәйәүләп тә йөрөп тороусылар бар. Юл һил ҡалған мәлдә велосипедта килеүсе бер малай күренгәс, Алим уға ҡаршы сыҡты. Малайҙы туҡтатып, алда ятҡан ҡасабаның Беловеж тип аталыуын, бөгөнгө көндөң йәкшәмбе булыуын, яҡын-тирәләге ауылдарҙан кешеләрҙең баҙарға килеүен белде. Ҡасҡындар, бында ятыуға ҡарағанда алға хәрәкәт итеүҙе хуп күреп, тағы аҙыраҡ атларға булдылар. Урман эсе һалҡынса. Үләне һирәк. Имән сәтләүеге юҡ. Төрлө япраҡтарҙы сәйнәп ҡарайҙар ҙа кире төкөрәләр.

Аңҡы-тиңке булып атлай торғас, урман эсендәге бер уратмаға барып төртөлгәндәрен үҙҙәре лә һиҙмәй ҡалды. Нимә был, хәрби әсирҙәр лагерымы? Бер мөйөшөндә ҡарауыл манараһы бар. Лагерь тиһәң, тауыш-фәлән ишетелмәй, манарала һаҡсы күренмәй. Тып-тын. Нимә өсөн ингәндәрен үҙҙәре лә аңғармай, ҡапҡанан эскә үттеләр. Кеше юҡ. Сәйфулла имгәкләп тигәндәй манараға менеп китте. Башҡалар ҡайһыһы ҡайҙа таралды. Манарала тәмәке еҫе лә бөтмәгән әле. Аяҡ аҫтында яртылаш тартып ташланған төпсөк күп. Шунда уҡ бер ҡап шырпы ла ята. Күрәһең, немецтар төндә был урынды ҡарауыллап сығалыр. Ә ни өсөн? Нимә бар бында?

Ермаковтың табышы барыһыныҡынан да уңышлыраҡ булып сыҡты. Ул баҙ тапҡан. Йәһәтләп, иптәштәренә ҡул болғап, барыһын да үҙ эргәһенә йыйып алды ла баҙға алып төштө. Баҙ ҙур ғына. Уға картуф тултырылған. Бынан да оло табыштың булыуы мөмкинме! Барыһы ла, шинелен сисеп, үҙе күтәреп бара алырҙай картуф төйнәп алды. Шатлыҡтарының иге-сиге юҡ ине. Немецтар көндөҙ, бәлки, бында килмәйҙер ҙә. Шулай ҙа тиҙ генә урман төпкөлөнә китергә кәрәк ине. Быны һәр кем яҡшы белә.

— Ә мин шырпы таптым! — тип Сәйфулла шатлыҡ өҫтәне.

Сей картуфты кимерә-кимерә күпме киткәндәрҙер — бер Алла белә. Үҙҙәренсә урман төпкөлөнәрәк инделәр. Туҡтап ут яғып ебәрҙеләр. Һәр кем утҡа картуф ташланы. Дөрләп янған ҡоро ҡарағай ботаҡтарынан көл төшкәс, картуфты көлгә күмделәр. Үҙҙәре, картуф йомшарғансы, ут йылыһында ятып, бер аҙ ойоп алды.

* * *

Хәҙер инде йәшәргә мөмкин! Көс кергәндәй, аяҡтар нығынғандай булды. Әкренләп баҙҙан картуф ташый-ташый ике-өс көн ошонда ял итеп, хәл йыйып алырға тигән ҡарарға килделәр.

Иртәгә юлды дауам итербеҙ тигән кистә Хәбибуллин менән Ибра-

ев ауылға төшөп тоҙ, әгәр ҙә табылһа, икмәк алып килергә рөхсәт һораны. Кәңәшләшкәндән һуң, Алим:

— Попытка не пытка. Рискнем, — тигән тәкдим индерҙе.

— Беҙ һеҙҙе ошо урында көтөп алырбыҙ. Һеҙ таңға ҡайтып етергә тейеш, — тип оҙатты уларҙы Яҡуп.

Ибраевтар китеп бер-ике сәғәт ваҡыт үткәс, ҡасабала атыш башланды.

— Бөттө. Һәләк булды дуҫтарыбыҙ, — тине әсенеп Алим. — Мин гәйепле. Ебәрмәҫкә булған. Бер аҙналыҡ картуфыбыҙ бар. Хәл йыйҙыҡ. Алға атларға ине, — тип үкенес белдерҙе.

Ибраевтарҙы таңға ҡәҙәр көттө лә Алимдар төркөмө, алдан һөйләшеп ҡуйғанса, төпкөлдәге төйәккә сигенеп, тағы бер аҙ көтөп ҡарарға булды.

Төш тә етте. Килеүсе юҡ.

Бишәү генә ҡалдылар. Ибраевтарға йә пуля эләккәндер, йә дошман ҡулына төшкәндәрҙер. Нисек кенә булһа ла, бында артабан ҡалыу хәүефле ине. Атларға булдылар.

Ике-өс саҡырым самаһы юл үткәс, улар киң генә йылға ярына барып төртөлдө. Нисек сығырға? Боҫа-боҫа, әкрен генә йылға буйын күҙәттеләр. Ермаков мурҙаға юлыҡҡан. Бауынан һөйрәп сығарып ҡараһа, балығы ла булған. Балығын алған да мурҙаны кире һыу төбөнә батырған. Йылға тәрән, күкһел, зәңгәрләнеп ята. Ике ярын да тал ҡаплаған. Кисеп сығырлыҡ шаршыһы юҡ. Йөҙөп сығыр өсөн дә аҫығыраҡ урынды табырға кәрәк. Йылғаның үренә лә, түбәненә лә барып ҡаранылар. Яҡында ғына йәтешле урын табылмағас, алыҫҡа киттеләр.

Сәйфулла, ике яҡтан да кисеү эҙләүселәрҙе көтөп, дауыл аҡтарып ташлаған йыуан ағастың тамырҙары араһында ултырып торҙо. Сеү! Тауыш килә түгелме? Ана-ана, Алим тип тә, Яҡуп тип тә, Сәйфулла тип тә ҡысҡыралар. Ибраев менән Хәбибуллин булһа кәрәк. Был ҡара урманда шуларҙан башҡа уларҙың исемен кем белһен?

Сәйфулла, ултырған урынынан тороп, ҡысҡырыусыларға тауыш бирҙе. Тегеләр хәлдәре бөтөп ашығып килеп етте. Ҡыуаныстарының сиге юҡ, ауыҙҙары ҡолаҡҡа еткән.

Йылға буйлап кисеү эҙләп йөрөүселәр ҙә әйләнеп килде. Бик түбәндә күпер бар икән. Берәмләп күпер аша сығырға ла теге ярҙа, урман төпкөлөнә инеп, бер-береһен көтөп алырға булдылар. Юлдан фашистарҙың йөрөп тороуы ихтимал. Шуға ла күпергә барыһы ла бер юлы барып инеү — тотош төркөмдө һәләкәткә дусар итеү булыр ине.

* * *

Ағас араһынан һаҙ кисә-кисә, компасҡа ҡарап, өс-дүрт сәғәт буйы атлағандарҙыр. Алда аҡлан күренгәс, Яҡуп, иптәштәренә туҡтарға ишара яһап, үҙе генә алға атланы. Бер аҙҙан ҡош булып һайрап, иптәштәрен саҡырып алды. Урман ситендәге ҡыуаҡ араһына боҫтолар. Аҡланда мал күп. Уларҙы бер малай менән оло йәштәрҙәге ҡатын көтә. Көтөүҙән ары һирәк-һаяҡ ултырған өйҙәрҙең мөрйәһенән төтөн күтәрелә. Әтәс тауыштары ишетелә. Ҡаҙҙар ҡаңғылдашып ҡуя.

— Әйҙә, Саша, һинең аяҡтарныҡ, итегең менән шинелеңде һал да көтөүселәр янына бар, — тине Яҡуп Сәйфуллаға. Башҡа ваҡытта гел Мазитов тип өндәшә торған дуҫы был юлы уға исеме менән мөрәжәғәт итте.

Көтөүсе ҡатын урмандан ҡарасҡыға оҡшаған әҙәми заттың килеп сығыуына ғәжәпләнмәне. Күрәһең, ҡасҡындар эленән-әле сығып торалыр, уларға өйрәнеп бөткәндәр инде.

Сәйфулла алыҫтан уҡ сәләм бирҙе. Ҡатын да уны сәләмләп ҡаршы алды. Эргәһенә килеп туҡтаған Сәйфуллаға үҙе ҡул биреп күреште, хәл-әхүәл һораны. Ҡайҙан киләһең, урманда күптән йөрөйһөңмө, тигән һорауҙар ҙа бирҙе. Сәйфулла уға аныҡ һәм ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына яуап менән сикләнде.

Ҡатын: «Ви-и-тя!» тип ҡысҡырып, ун-ун бер йәштәрҙәге малайҙы саҡырып алды.

— Ейәнем, — тине Сәйфуллаға, ҡурҡма, үҙебеҙҙең кеше, тип аңлатҡандай. Шунан: — Һеҙ нисәү? — тип һораны.

— Етәүбеҙ.

«Ҡатындан ашарға һора, үҙем генә тип әйт, был тирәлә ҙур ауылдар, ҡала бармы икән, ауылда фашистар торамы», тип әйтеп ебәрһәләр ҙә, Сәйфулла ҡатындың тура һорауына тура яуап бирмәй булдыра алманы. Үҙем генә тиһәм, ашарға аҙ килтереп ҡуйыр, тип уйланы ул. Һәм яңылышманы.

— Мулыраҡ килтер, түтәлдән ҡыяр өҙөп ал, ете кеше туйырлыҡ булһын, — тип ҡалды ҡатын.

Малай киткәс, көтөүсе ҡатын моҡсайынан икмәк, сусҡа майы алып, Сәйфуллаға тотторҙо. Ә ул ризыҡты ҡабып та ҡарамаңы, иптәштәре ултырып ҡалған яҡҡа ҡарап тора бирҙе.

— Аша, уларға ла табырмын, — тине ҡатын.

— Ғәфү ит, булмай, беҙ бөтөн нәмәне уртаҡлашырға күнеккәнбеҙ.

Ҡатын уны аңланы. Ныҡышманы.

— Ауылыбыҙҙа немец юҡ. Һирәкһаяҡ ҡына килеп сығалар. Кис менән ҡурҡмай килеп, һәр берегеҙ бер өйҙә туйынып китә ала. Күрше ауылда һеҙҙең кеүек бер һалдат йыл буйына йәшәне. Әле партизандарға киткән тиҙәр.

Иптәштәре Сәйфулланы килтергән ризығы, яҡшы хәбәрҙәре өсөн рәхмәт әйтеп, шатланып ҡаршыланы. Ашап алдылар. Кәйефтәре күтәрелде. Хатта шаян һүҙ һөйләп, көлөшөргә лә әмәл табылды. Кис менән ауылға инеп ризыҡланырға ла таң менән юлды дауам итергә булдылар. Ҡатын нисек кенә ирәбе, хәстәрлекле күренергә тырышмаһын, һаҡсыллыҡ тураһында сара күрмәй ярамай ине. Башҡаларҙы ҡыуаҡлыҡта ҡалдырып, Сәйфулла, Хәбибуллин һәм Ғәлиев ауылға йүнәлде.

Ауыл ситендәге өйҙә ете-һигеҙ йәшлек ҡыҙ менән утыҙ-утыҙ биш йәштәр самаһындағы ҡатын йәшәй икән. Сәйфуллалар ишекте асып инеү менән ҡатындың ҡобараһы осто.

— Алла хаҡы өсөн, сығып китегеҙ, — тине ул, күҙ йәштәренә төйөлөп. Ҡыҙын ҡурсалап, ҡосағына алды.

Баҡтиһәң, ошондай урман ҡарасҡылары инеп тамаҡ ялғап сыҡҡан өсөн фашистар бер ғаиләне атып, өйөн үртәп киткән. Урмандан килеүселәрҙе ниндәйҙер әҙәм аҡтығы күреп ҡалған да күрше ауылдағы полицайҙарға хәбәр иткән.

Быларҙан анһат ҡына ҡотолоп булмаҫ, тигәндәй, ҡатын ҡасҡындарға ике сүрәк икмәк биреп оҙатты.

— Әйҙә тағы бер өйгә инеп ҡарайыҡ, — тине Хәбибуллин, сыҡҡан ишектәре келәгә эленгәс. — Сәйфулла, һин икмәктәрҙе алып, иптәштәр янына ҡайта тор. Беҙ оҙаҡламайбыҙ. Бер-ике өйгә инеп, бәхетебеҙҙе һынап ҡарайыҡ әле.

— Афарин, беҙҙең урамда ла байрам бөгөн, — тип ҡаршы алды икмәк тотоп ҡайтҡан Сәйфулланы иптәштәре.

Ләкин, күп тә үтмәй, һауаға ракеталар сөйөлдө. Атыш тауыштары яңғыраны. Лауылдап ауылда эттәр өрҙө. Күпме генә көтһәләр ҙә, Хәбибуллин менән Ғәлиев әйләнеп килмәне. Ҡасҡындарға урман төпкөлөнә инеп юғалыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Иртәгеһенә утынға килгән ҡарттан урмандан сыҡҡан ике кешенең тотолоуы һәм ҡайҙалыр оҙатылыуы тураһында белделәр.

* * *

Ҡурҡаҡ ҡатындан алып сыҡҡан икмәк тә, картуф та күптән ашалып бөттө. Урмандың осо-ҡырыйы күренмәй. Аяҡ аҫты һыу. Балаларын эйәртеп ҡабан сусҡалары йөрөп ята. Тәүге мәлдә уларҙан ҡурҡһалар ҙа, көндәр үтеү менән күнектеләр. Ҡабандарҙың ҡасҡындарҙа эше юҡ.

Инеп ризыҡ һорап алырға ауылдар осрамай. Һаҙҙа үҫкән бөҙрә япраҡлы бер үҫемлекте Ермаков эйәлеп еңел генә тартып сығарҙы. Кишергә оҡшаған аҡ тамыр ине ул. Уның табышын күреп ҡалып, башҡалар ҙа шундай уҡ үҫемлек эҙләй башланы. Бара биргәс, Сәйфулла ла берҙе йолҡоп алды. Был мәлдә Ермаков кишерҙең яртыһын ашап өлгөргәйне инде. Ҡалҡыуыраҡ ағас төбөнә ултырып, хәл йыйып алырға булдылар. Барыһы ла йыйылышып сүгәләгәнсе, Ермаков ҡысҡырып

салҡан ауҙы. Ауыҙынан аҡ күбек килеп сыҡты, күҙҙәре аҡайҙы, нимә эшләргә белмәй бер-ике тибенде лә хырылдап йән бирҙе. Сәйфулла ашарға әҙерләгән тамырын ташлап ебәрҙе. Һаҙлыҡта шул үҫемлекте эҙләп йөрөгән иптәштәренә ҡысҡырҙы:

— Ашай күрмәгеҙ! Ағыу!

Илгә ҡайтып етеренә оло өмөт бағлаған, бер ваҡытта ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгән, иң ауыр минутта ла оҙон башҡорт көйҙәрен моңрап барырға ятраҡан Ермаковтың ҡапыл ғына яҡты донъянан китеүе барыһын да тетрәндерҙе. Мәйет эргәһенә теҙләнделәр. Ибраев мәрхүмдең күҙен йомдорҙо, япраҡ өҙөп алып ауыҙындағы аҡ күбекте һөрттө. Сәйфулла өҫтөнә шинель япты. Алим аяҡтарын, Яҡуп ҡулдарын рәтләп һалды. Һәр кем булдыра алғанса хөрмәт итергә тырышты. Уларға берәү ҙә, һин шуны эшлә, мин быны эшләйем, тип торманы. Ошо урманда мәңгегә ятып ҡаласаҡ дуҫы өҫтөнә йәш ылыҫ һындырып һалдылар.

Ауыр ине хушлашыу минуттары. Күпме ыҙаны бергә сиктеләр. Бәләкәй генә табыштарын да бергә уртаҡлаштылар. Бер-береһенән айырылышмаҫҡа, иҫән-аман илгә ҡайтып етә алһалар, бер сафта йөрөп дошмандан үс алырға, тыныс тормошҡа күскәс хат алышып, күрешеп йәшәргә вәғәҙә биргәйнеләр. Барыһы ла хәҙер генә Ермаковтың төркөмдө берләштереп, сыныҡтырып йөрөүсе кеше булыуын бөтөн йөрәге менән аңланы. Бер-береһе менән һөйләшмәһәләр ҙә, һәр кемдең йөҙө буйлап аҡҡан күҙ йәше бының тел менән әйтеп бирә алмаған шаһиты ине...

* * *

Фашистар тырнағынан ҡасыуға бер ай үтте, буғай. Тоҫмал менән шулай самалайҙар. Үткән көндәрҙең һанын иҫәпләп барыу мөмкинлеге юҡ. Көн оҙонлоғона, ҡояштың көндән-көн ҡыҙыуыраҡ йылытыуына ҡарағанда, апрель бөтөп тә киләлер инде. Ике иптәштең урманда ятып ҡалыуы, икәүһенең дошман ҡулына эләгеүе һәр кемдең башына йырып сыҡҡыһыҙ уйҙар һалды. Донъяла, әйтерһең, бер-береһе менән һөйләшергә һүҙҙәр ҡалманы. Һәр кем аҡылын юғалтҡан кеше һымаҡ алға төбәлеп, тәнтерәкләй-тәнтерәкләй атлауын белә. Кем ҡайҙа барып йығылыр — яҙмыш ҡулында.

Юлдарында ағастан бейегерәк итеп ҡоролған маяҡ осрағас, ҡасҡындарҙың һүнеп барған күҙендә тағы өмөт атҡылары ҡабынды. Ибраев менән Алим бер-береһенә ярҙам итешеп, уның баҫҡысы буйлап үрмәләне. Башына уҡ менеп етмәһәләр ҙә яҡында ғына ат юлы булыуын, арыраҡ төтөн бағанаһы күтәрелеүен күрҙеләр. Был яңылыҡ ҡасҡындарға көс өҫтәгәндәй итте. Юл буйлап ауылға төшөргә булдылар.

Урман юлы тар ғына. Арба эҙҙәрен үлән баҫҡан. Ахыры, һуңғы осорҙа унан йөрөүсе лә булмағандыр. Ҡасҡындар юл буйлап күп тә барманы, ҡаршыға килеүсе кешене күреп ҡысҡырыша башланылар. Кеше ялтайып урманға инеп китте. Ҡурҡтымы? Уның был ҡыланышы сәйер тойолһа ла, ҡасҡындар уға артыҡ иғтибар бирмәне, үҙ юлдарын дауам итте. Урмандың теге кеше инеп киткән тәңгәленә еткәс, ул үҙе ҡаршы сыҡты.

— Төндә атымды урлап киттеләр. Шуны эҙләп китеп бара инем, — тине ул, ғәфү үтенгәндәй.

Ҡарттан шуны белделәр: алда, Польша менән СССР-ҙың элекке сигендә, ике дәүләтте айырып торған Шары йылғаһы бар. Йылға киң, тәрән.

— Һеҙгә һулғараҡ тартып күпергә барырға кәрәк, — тине ҡарт. — Күперҙе пулемет менән һаҡлайҙар, ләкин постары күпергә өс-дүрт метр етмәй урынлаштырылған, шлагбаум эргәһендә. Һаҡлыҡ менән генә төндә үтһәгеҙ, йылға аша сығып китә алырһығыҙ. Был тирәлә ауыл күп. Һәр береһендә немецтар тора.

Шулай тине лә ҡарт, ҡасҡындарҙы күпер яғына табан алып китте. Бер-ике километр самаһы барғас:

— Һеҙ ошонда ултырып тороғоҙ. Мин һеҙгә ашарға килтерәйем, — тип китеп барҙы.

Алдаһа алдап киткәндер инде, кешене ҡайҙан беләһең. Полицай-

ҙар эйәртеп килеүе лә мөмкин, ләкин ҡасҡындарҙың аңы томаланған. Улар аңлы эш итер хәлдә түгел, донъянан төңөлөп, яҙмыш ихтыярына бирелгәндәр.

Ҡарт алдамаған икән. Бер аҙҙан юл буйында күнәк тотҡан ун-ун ике йәштәр самаһындағы ҡыҙ күренде. Ул йырлай-йырлай ҡасҡындарға тауыш биреп килә ине. Ҡарт юлды дөрөҫ өйрәткән. Ҡыҙ төркөмгә туп-тура килде. Күнәген уртаға ҡуйҙы ла, ситкәрәк барып, икенсе ҡыуаҡ аҫтына боҫто. Күнәктә бер стакан самаһы он, аҙ ғына тоҙ, бер йомортҡа, ике йөҙ илле грамлыҡ шешәгә ҡойолған көмөшкә, табаҡ менән ҡалаҡтар, шырпы бар ине. Ҡасҡындар аш бешереп ашағас, ҡыҙ, ғәмһеҙ генә уйнап йөрөүсе бала һымаҡ, күнәген болғап, йырлай-йырлай ҡайтыу яғына ыңғайланы...

* * *

Тулы ай нурын ергә йәлләмәй һибә. Күк йөҙөндә һирәк-һаяҡ ҡына йондоҙҙар емелдәшә. Бала йүргәге ҡәҙәре генә булһа ла болот сығып, айҙы бер-ике минутҡа ҡаплап торор тип ышанып булмай. Етмәһә, ике яҡтан күпергә табан төрлө төҫтә яныусы пулялар менән атып торалар. Күперҙең үҙендә әҙәм заты булмаһа ла, уны тик шыуышып ҡына үтер кәрәк, сөнки пулялар өҫтәнерәк жыйтылдай.

Күперҙе шыуышып сыҡҡас, ҡасҡындар урманға йүгерҙе. Немецтар атып ята бирһен әйҙә. Төркөм иҫән-аман сығып китә алды.

Тамаҡ туҡ тип әйтеп булмаһа ла, түҙергә мөмкин. Нисә километр киткәндәрҙер, бара торғас, ауыл ситендә ҡаҙ көтөп йөрөгән бер ҡарт күренде. Был ҡартҡа ла Сәйфулланы ебәрҙеләр.

Алама кейемле, һаҡал баҫҡан, ялан аяҡ Сәйфулла ҡарт эргәһенә килде лә өндәшмәй-нитмәй ергә ултырҙы. Ҡарт артына әйләнеп ҡарағас ҡына уны:

— Здоровенки булы! — тип сәләмләне.

Ҡарт, сәләмде алып, уға оҙаҡ ҡына ҡарап торғас:

— Кем һин? Ҡайҙан киләһең? — тип һораны.

— Ауылда немецтар бармы? — тине Сәйфулла турана-тура.

— Килеп-китеп торалар, — тине ҡарт. — Бер үҙең генәме?

— Бер үҙем генә.

Ҡарт ситтәрәк һарыҡ көтөп йөрөгән малайҙы саҡырып алды ла, үҙ телендә нимәлер әйтеп, уны ауылға йүгертте. Малай оҙаҡ көттөрмәне. Икмәк, һөт, йәшелсәләр күтәреп килде. Сәйфулланы иптәштәре «Урра!» ҡысҡырып, сәпәкәйләп ҡаршы алды.

* * *

«Юлда һиңә минең кеүек ҡарттар осрап торор. Берәһенән дә ҡурҡма. Ярҙам итерҙәр», — тип оҙатҡайны ҡарт. Ысынлап та, ауылды үткәс бер нисә ҡатын тап булды. Улар, алдағы ауылда туҡтарһығыҙ, унда әле немецтар юҡ, партизандарҙы тапмаһағыҙ, улар һеҙҙе үҙҙәре эҙләп табыр, тип ебәргәйне. Шулай ҙа ауылға инергә батырсылыҡ итмәнеләр. Ҡараңғы төшкәнсе урманда ятып, күҙәтергә булдылар.

Ай ҡалҡып өлгөрмәгәйне әле. Эңер араһы. Разведкаға ебәрелгән Ибраевтың һыҙғырыуы тауышы ишетелде. Саҡыра. Ауыл осонда уларҙы бер-нисә ҡоралл̧ы кеше ҡаршыланы. Күрештеләр. Береһе төркөмдө урам буйлатып алып китте.

Алты мөйөшлө өйҙөң төпкө бүлмәһендә етеле шәм яна. Уның һүрән генә нурында бүлмәләгеләрҙең йөҙөн асыҡ ҡына байҡарлыҡ түгел. Ҡасҡындарҙы эйәртеп алып килеүсе егет, өҫтәл эргәһенә үтә биреп:

— Иптәш командир, урманда ҡасып йөрөгән дүрт ҡыҙылармеецты килтерҙем, — тигәс, урта буйлы кеше тороп:

— Бик хуп, — тине лә шәмде күтәреп ҡасҡындарға яҡынлашты. — Һеҙ кемдәр? Ҡайһы лагерҙан?

— Седлице лагерынан, — тип барыһы өсөн дә Яҡуп яуап бирҙе.

Унан һәр кем үҙенең исем-фамилияһын әйтеп таныштырҙы.

— Егеттәрҙе ашатып алырға кәрәк башта. Нисә көн ашағаныгыҙ юҡ? Биш көн? Ә ҡасан ҡастығыҙ?

— Егерме етенсе марта.

— Бөгөн 6 май. Оһо! Ҡырҡ көн.

Разведка командиры ҡушҡанса, ҡасҡындар иртәгә Шары йылғаһы буйлап ике километр самаһы юл үтергә һәм отрядтың бәләкәй базаһына барырға тейеш ине. Отрядҡа дүрт кешелек өҫтәмә көс киләсәген алдан хәбәр иткәндәр. Юлға сығып уларҙы бер йәш егет ҡаршы алды. Үҙҙәренә генә билдәле паролде әйтә-әйтә өс посты үткәс, ағас араһында землянкалар күренде. Партизандарҙың бер отряды торған лагерь ошо икән.

Партизандар килеүселәрҙе һырып алды. Ҡыҙыҡһыналар. Йәлләйҙәр. Һорашалар. Ярҙам тәҡдим итәләр. Көс-хәл менән тигәндәй уларҙы йырып үткәс, отряд командиры менән таныштылар. Уның да һорауҙары күп булып сыҡты.

— Бөгөнгә йыуынығыҙ, мунса инегеҙ. Был аламаларығыҙҙы һыпырып ташлағыҙ, яңы кейем бирербеҙ, — тине.

Кемдең кем булыуын, ҡайҙа хеҙмәт итеүен, нисек әсир төшөүен һораша башланы.

— Мин Яков Милькомонов. Лагерҙа ла, юлда ла иптәштәрем мине Яҡуп Мәхиәнов тип белде. Милләтем йәһүд булғас, үлемдән исем-фамилиям һәм милләтемде йәшереп кенә ҡотолоп ҡалдым. Ҡыҙыл Армияның интендант хеҙмәте капитанымын. Танк часында хеҙмәт иттем, Фин һуғышында ҡатнаштым. Ғөмүмән алғанда, 1921 йылдан армияламын. Һуғышты 1941 йылдың ҡәһәрле йәкшәмбеһендә, сик буйында ҡаршыланым. Ғаиләм Минскиҙың Когановичи районында йәшәне.

— Мин йәһүд, — тип һүҙ башланы Алим да. — Мәскәүҙәнмен. Армияға тиклем РСФСР мәғариф халыҡ комиссариатында хеҙмәт иттем. Фамилиям Голденберг.

Был танышыуҙы тыңлап ултырған Фәйзиҙең күҙе маңлайына менде. Йәһүдтәр? Татармын тип йөрөһәләр ҙә, әйтәм бер ауыҙ татарса белмәйҙәр ине. Ярай инде, Алим — һуйып ҡаплаған татар. Аҡ сырайлы, зәңгәр күҙле, ҡаҡса яңаҡлы. Гел генә «Ғәлиәбаныу»ҙы мөңрәп йөрөй. Нисек оҫта ҡылана татар булып. Ә бына Милькомоновты бығаса йөҙөнә ҡарап йәһүд тип белмәүе ғәжәп. Абайлап текләһә ни булған. Моғайын, күҙ төбөндәге ҡапсығына йәки танауының аҙ ғына көмөрө булыуына ҡарап булһа ла татар түгеллеген абайлар ине. Оҫта! Бына тигән артист. Немецтарҙы ла ышандыра алған бит.

Сәйфулла менән Фәйзи ҙә тормош юлдарын ҡыҫҡаса ғына һөйләп бирҙе.

* * *

Ике көн ял иткәс, Фәйзи Ибраев бер төркөм партизандар менән заданиеға китте. Партизандарҙың һимеҙ ашы Яков Милькомоновҡа килешмәне. Ул лагерҙа ятып ҡалды. Айырылышҡанда иптәштәрҙең ҡулын ҡыҫып, ҡосаҡлап, арҡаһынан һөйөп, һеҙ минең ҡотҡарыусыларым, тине. Күҙенә йәш тулды. Рәхмәттәр уҡып хушлашты.

— Ярар, тыныс бул, Яков Абрамович, — тип уның ап-аҡ сәсенән һыйпаны Сәйфулла, — илдәбеҙ бит инде, бирешмәҫһең.

— Һин Яков Абрамовичтың кем икәнлеген белгәйнеңме? — тип һораны Алим Сәйфулланан.

— Белмәй ни. Беҙ уның менән һуғыштың тәүге көндәрендә үк осрашҡайныҡ. Ул миңә дүрт патроны менән пистолет бүләк итте.

— Мин һине ашханаға уның тәҡдиме буйынса алдым. Лагерға һеҙҙе килтергәс тә һине күреп ҡалған. Бик ышаныслы иптәш бар, уны үҙеңә яҡынлат әле, тип һине күрһәтте. Хәтерендәме? Лагерҙағы тәүге осрашыуығыҙҙа мин уны Яҡуп Мәхиәнов тип таныштырғайным. Конспирация һаҡларға кәрәк ине. Беҙ шул ваҡытта уҡ лагерҙа ойошторолған йәшерен патриотик ойошма ағзалары инек.

— Әлбиттә, иҫемдә. Мин дә үтә томана кеше түгелмен шикелле, — тине Сәйфулла. — Шуға ла ҡырҡ көн буйы Яков тип һүҙ ҡатманым.

Дошманды үҙ өңөнә индереп дөмбәҫләгәнгә ҡәҙәр бер отрядта ҡалырға һүҙ беркетте дуҫтар.

* * *

Барановичи районында төйәкләнгән ҙур партизан берекмәһенең капитан Цыганов отрядында ине

улар. Сәйфулланың Барановичи районына икенсе тапҡыр әйләнеп килеүе.

Отрядҡа килеүҙәренә дүрт-биш көн. Быуындар әле нығынып етмәгән. Шулай ҙа ҡулға винтовка тотҡас, билгә гранаталар тағып алғас, аяҡта итек тә булғас, ҡырҡ көн буйы үткәргән ауыр көндәр артта ҡалды, тип тынысландылар. Хәҙер дошмандан барыһы өсөн дә үс алырға була. Аяуһыҙ һуғышасаҡ Сәйфулла.

«Батя»* етәкселек иткән партизандар берләшмәһенең төп лагеры Пинск һаҙлығында. Сәйфуллаларҙы бында килтергәндә төп лагерға башҡа отрядтарҙан да вәкилдәр йыйылғайны. Төрлө милләт кешеләре бар. Күпселеге украиндар менән белорустар. Байрам һымаҡ ҙур табын ойоштороп, вәкилдәрҙе һыйланылар. Ял иттерҙеләр. Иртәнге аштан һуң сафҡа теҙҙеләр ҙә хәҙер «Батя» килеп етә тип хәбәр иттеләр.

«Батя» тигәндәре яҡшы атта һыбай килде. Ҡара һаҡаллы, мыҡты кәүҙәле, урта буйлы, утыҙ-утыҙ биш йәштәрҙәге хәрби кеше. Отрядтарҙан килгән вәкилдәр менән күрешеп сыҡҡас, ул командирҙар менән айырым һөйләште лә ҡабат саф алдына килеп баҫты:

— Кем үҙе теләп көнбайыш Каплун отрядына барырға риза — биш аҙым алға сығығыҙ. Ундағы отрядҡа фашистар ҙа, власовсылар ҙа, бандеровсылар ҙа тынғы бирмәй, — тине.

Саф алдына алтмышлаған кеше сығып баҫты.

Яңы урынға барғас, Сәйфулла менән Алимға айырылышырға тура килде, сөнки төркөмдәргә хәрби хеҙмәттә булған кешеләр кәрәк икән. Улар икеһе ике ротала хеҙмәт итә башланы. Ротаға бүленгәс, Сәйфулланы лейтенант Василевский үҙ төркөмөнә алды. Шаян һүҙле, ҡаҡса ғына кәүҙәле, ҡурҡыу белмәҫ был партизан дошмандың өс эшелонын шартлатып өлгөргән, башҡа ҡыйыу операцияларҙа оҫта һуғышыуын да иҫәпкә алып, уны Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләгәндәр.

— Беҙҙең егеттәрҙең хәрби әҙерлеге етеңкерәмәй — Ҡыҙыл Армияла хеҙмәт итмәгәндәр. Һинең килеүең бик шәп булды әле, — тине ул Сәйфуллаға ҡыуанысын йәшермәй.

Отряд урынлашҡан Слоним районы хәрби йәһәттән бик әһәмиәтле. Киевҡа һәм Минскиға китә торған тимер юл айырсаһы ошонда. Алмаш-тилмәш ике юлда ла диверсия эштәре алып барырға мөмкин. Поездар йыш йөрөй. Поезд көнсығышҡа табан ҡорал, яңы көс ташыһа, көнбайышҡа яралы һалдаттарҙы алып ҡайта. 1942 йылда рельс һуғыштары башланып киткәс, дошман тимер юлды ҡарауыллау өсөн күп һалдат тота. Күперҙәргә, юл бороloштарына, ҡабралы үткәүелдәргә пост ҡуйып, пулеметтар ултыртып бөткән. Һаҡсылар юл буйлап тегеләй ҙә, былай ҙа йөрөп тора. Партизандар ҙа айҙан-айға, көндән-көн оҫтара, оһоллана бара. Федор Василевский ошо тирәләге ауылдарҙың береһенән. Ул урманда ҡамауҙа ҡалған ҡыҙылармеецтар менән берлектә ауылдарҙың коммунистарын һәм намыҫлы кешеләрен йыйып, партизан отрядын ойоштороуҙа ҡатнашҡан. Районда поляк ҡарты туплаған икенсе бер отряд та була. Федор, ул ҡарт менән осрашып, ике отрядты берләштерә. Уларға тирә-йүндәге башҡа партизан төркөмдәре ҡушылған. Торабара Каплун етәкселегендәге отряд барлыҡҡа килгән һәм 1942 йылдың көҙөнә инде ҙур берләшмә булып тупланған. Мәскәү уға командующий итеп «Батя»ны билдәләгән.

Һуғышта кешенең һәләк булыуы күҙ асып йомғансы. Федор менән дә шулай булды.

Ғинуар аҙаҡтары ине. Василевский партизандары диверсияны асыҡ яланда ойошторҙо. Паровоз килеп етеүгә рельс аҫтына һалынған мина шартланы. Фронтҡа һалдаттар алып барыусы вагондарҙың икәүһе нисектер тәкмәсләмәй ҡалды. Атыш китте. Партизандар, дошманды дөмөктөрөп бөттөк тип, ҡайтыр юлға сыҡҡас, алдағы кәбән төбөнән уларға ҡаршы автомат уты астылар. Пуля үҙ ҡорбанын һайламай һәм бер кемде лә аямай бит ул. Үлемесле яра алыусылар бар ине.

*«Батя» — Советтар Союзы геройы Г.М.Линков.

Юл башлап, көрт ярып атлаусы Федор иһә дошмандың тәүге пуляларынан уҡ һәләк булды. Кәбән төбөндәге фашистар ҙа дөмөктө.

Отрядҡа был тирәлә ҡалырға ярамағандыр инде, шул төндә үк уға Люблин районына күсергә бойороҡ килде.

* * *

Ялҡынлы ватансы Федор Василевскийҙың үлемен төркөм ауыр кисерҙе. Мәйетен урман төпкөлөнә ерләнеләр ҙә, лагерҙа йәшәгән атаәсәһен, ҡатынын һәм бала-сағаһын үҙҙәре менән күсереп алып киттеләр. Төркөмгә командир булып майор Христофоров килде. Сәйфулла уның тураһында ишетә генә белә торғайны. Берләшмәлә ҡыйыу командир булараҡ дан алғайны ул.

— Беҙҙең төркөмгә яңы бурыстар йөкмәтелә, — тине яңы командир ҡул аҫтында буласаҡ партизандары менән танышҡан саҡта уҡ. — Бынан ары дошман менән туранан-тура бәрелешеү ҡәтғи тыйыла. Беҙ юғары ставкаға дошман тураһында мөмкин тиклем тулы һәм дөрөҫ мәғлүмәт биреп торорға тейешбеҙ. Беҙ — разведчиктар. Киев яғына китеүсе поездарҙы күҙәтеү, ниндәй йөк менән үтеүен асыҡлау; аэродромдарҙағы самолеттарҙың сәғәт нисәләрҙә һауаға күтәрелеүен һәм ҡасан әйләнеп ҡайтыуын аныҡлау, кәрәк икән, һирәкләп тимер юлына диверсия ойоштороу. Дошмандың ҡалаларҙағы төрлө нығытмаларын да күҙәтеү беҙҙең эш. Немец комендатураларында, госпиталдәрендә, төрлө ойошмаларында ялланып эшләүсе поляктарҙы үҙ яғыбыҙға ауҙарыуҙы һәм улар аша мәғлүмәттәр йыйыуҙы ла юлға һалырға тейешбеҙ. Бөтә ошо эштәребеҙ хаҡында беҙ көндән-көн оло ергә хәбәр итеп торасаҡбыҙ. Юғары командование һәм ставка беҙҙән шундай мәғлүмәттәр көтә. Эшебеҙҙе ул шул мәғлүмәттәргә ҡарап баһалаясаҡ.

Үкенескә ҡаршы, бөтәһен дә Үҙәк ҡушҡанса ғына эшләп булмай. Көтөлмәгән хәлдәр сәғәт һайын осрап тора.

Төндә тимер юлына мина ҡуйғас, шул урындан ун биш-ун алты саҡырымдағы бер урынға барырға тейеш инеләр. Унда бай помещик йәшәй. Байҙы ҡарт һалдаттар ғына һаҡлай, тинеләр.

Төркөм барып етеүгә һаҡсылар ҡалмағайны. Тимер юлында ҙур диверсия булып, состав ауған да, һалдаттарҙы ярҙамға алып киткәндәр. Бейек ҡойма менән уратылған ихата ҡапҡаһы бикле. Автоматлы һаҡсы урынына ҙур ғына йоҙаҡ тора. Партизандарға ҡойма аша һикереп төшөүҙән башҡа юл юҡ. Бер-береһенә ярҙам итешеп, барыһы ла инеп еткәс, ике ҡатлы йортҡа йүнәлделәр. Күршеләге бәләкәйерәк йорттан баярға эшләп йөрөгән поляк ҡарттары сыҡты. Улар, партизандарҙың килеүенә шатланып, ихлас ярҙам итергә тотондо.

— О! Русь, совьет, — тип ҡабатлай-ҡабатлай, йүгерешеп йөрөп, ике арбаға ат ектеләр.

Бер ҡарт партизандарҙы байҙың бүлмәһен күрһәтергә алып китте. Затлы йорт. Түшәмгә элгән алтынлы-көмөшлө ҡәндилдәргә электр лампалары боролған. Диуарҙарҙа, алтынланған рамдарҙа ниндәйҙер дәрәжәле кешеләрҙең портреттары. Йомшаҡ диван, креслолар. Зал уртаһындағы түңәрәк өҫтәлдә кәрт ята. Көл һауытында — тәмәке төпсөктәре. Тәҙрәгә яҡын ултыртылған ағас мискәләрҙә — эре япраҡлы гөлдәр.

Байҙың бүлмәһе бикле булып сыҡты. Күпме генә шаҡыһалар ҙа асыусы булманы. Артҡы ишектән сығып ҡасҡандыр ул, тигән фекергә килде поляк ҡарты.

— Ярай, ҡаһа ҡаса бирһен. Әллә ҡайҙа бармаҫ әле. Һаҡсыларҙың ҡайтып етеүе бар. Бында оҙаҡ ҡалырға ярамай, — тиеште партизандар.

Асҡыс табып, байҙың хеҙмәтселәре ҡапҡаны асып, арбаларға атып үлтереп ике сусҡа, он, май, картуф тейәне. Партизандар, уларға рәхмәт әйтеп, төп төйәктәренә ҡайтыу юлына ыңғайланы.

Яҡшы аттар арбаға сыбайлап егелгән. Крәҫтиән белә ул: тар ғына урман юлында ҡушарлатып егелгән аттар менән йөрөп булмай. Төркөм арбаларға икегә бүленеп ултырҙы. Христофоров — алдағы арбала.

Урман юлы буйлап күп тә үтмәнеләр, һауала самолеттар геүләй башланы. Ағас башына тейә яҙып тигәндәй, аҫтан ғына осоп китәләр. Ҡайҙалыр барып, бомба яуҙырып, йөктән бушанып аэродромға ҡайтып барыуҙары шулдыр инде. Сәйфулла түҙмәне, автоматын күтәрә һалып, летчикка ҡыҫҡа ғына очередь бирҙе. Эргәһендә ултырған иптәштәре лә таш бәреп тейҙерерлек осоп барған самолетҡа атмай булдыра алманы. Алдағы арбанан Христофоров һикереп төштө лә маузерын ҡулына тотоп:

— Кто вам разрешил стрелять, — тип арттағы арбаға ташланды. Алғы күсәр тәңгәлендә ултырып килгән партизандың яңағына сабып ебәргә ынтылған мәлендә генә алдағы арбанан:

— Горит! Подбили! — тип ҡысҡырып, атына сыбыртҡы тартты.

Аттар йән-фарман сабып, һә тигәнсе арттағы йөктән утыҙ-ҡырҡ метрға айырылып өлгөрҙө. Арттағы арбала килеүселәр Христофоровты, ҡулынан тартып, үҙҙәре эргәһенә ултыртты.

Урман бөттө. Урманды ҡырлап таш юл үтә. Артабан — арыш баҫыуы. Самолет ут эсендә. Партизандар йүгерешеп барып та етте. Сәйфулла, кабинаға инеү менән, ҡалын ғына планшетҡа тотондо. Ике партизан пулеметты алырға теләгәйне лә, ул нык беркетелгән булып сыҡты.

Самолеттағы партизандар тиҙ генә тирә-яҡҡа һибелде. Өлгөрҙөләр. Улар йығылыуға самолет та шартланы.

Летчиктары алыҫ китмәҫкә тейеш. Ҡуҙғалған арышты күҙәтеп, шул тирәгә автоматтан бер-ике һиптергәс, ике немец, аҡырып ебәреп, ҡулдарын күтәрҙе. Яраланғайнылар. Ҡоралһыҙландырып, арбаға ултыртып алдылар. Өсөнсөһө булырға тейеш бит? Уныһы ҡайҙа икән? Ул арала ауылдан бер-ике ҡатын килеп етте.

— Өсөнсөһөнә теймәгеҙ. Юғиһә, ауылыбыҙҙы тотош бөтөрәсәктәр, — тип инәлә ине ҡатындар.

Партизандар ҡатындар менән ризалашты. Әсиргә алынған ике немец, нисек кенә ҡыҫымға алмаһындар, ауыҙына һыу уртлаған һымаҡ, ләм-мим өндәшмәне. Ахырҙа тәржемәсе менән тәфтишсе ҡул һелтәне. Уларҙы шунда уҡ атып, икеһен бер соҡорға һалып, өҫтәренә тупраҡ ташланылар.

Төндә оло ерҙән самолет килде. Ул дошман самолетынан алынған планшетты алды ла фронт һыҙығы аша кире осто. Оҙаҡламай Мәскәүҙән радиограмма килде. Унда ҡиммәтле трофей өсөн бөтөн отрядҡа рәхмәт белдерелгәйне.

* * *

— Кто здесь Сайфулла Мазитов?

Оран һалыусы партизан яр башында сисеп һалынған кейемдәр араһында тора. Кейем хужаларының барыһы ла күлдә. Йыуыналар.

Оранды ишеткәс тә Сәйфулланың йөрәге жыу итеп ҡалды. Кемгә, нимәгә кәрәк булдым икән? Яҡшыға булһа ярар ине, тип уйларға ла өлгөрмәне, эргәһендә торған иптәше:

— Вот он, здесь! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Сәйфулла ярға табан атланы.

— Тебе письмо, — тине яр башында торған партизан.

— Хат?

Был хәбәрҙе иптәштәре Сәйфулланың үҙенән кәм шатлыҡ менән ҡабул итмәгәндер.

Хат Фазилаһынан ине. Үҙенең дә, улы Илгиздең дә, әсәһенең дә, күрше-күләндең дә иҫән-һаулығын белдергән. Колхозсыларҙың фронт файҙаһына фиҙакәр эшләүен, мәктәптә уҡыуҙарҙың һәйбәт кенә барыуын яҙған. Сәйфулланан хат алғас, бөтөн ауыл халҡының шатланыуының сиге булмауын, барыһының да ихлас ҡотлауын белдергән. «Һинең партизан булып, дошманға ҡаршы һуғышып йөрөүең барыбыҙ өсөн дә ғорурлыҡ. Хат-хәбәрең булмағас, ҡурҡып бөткәйнем. Хәҙер улым менән минеке генә түгел, тотош ауылыбыҙҙың мәртәбәһен күтәрҙең, данын арттырҙың», — тип яҙған. Ауылдың үрге осонан түбәнге осона ҡәҙәр, бала-сағанан алып ҡартына тиклем ҡайнар сәләм әйтеп ҡалыуҙарын белдергән. Хаттың аҙағына Илгиздең тәпәйе менән

ҡулын баҫтырып, ҡәләм менән һыҙып сыҡҡан да, «Улың һинең менән йүгереп барып күрешә», тип яҙып ҡуйған. «Уға инде өс йәш, һөйләшеп йөрөй, мин уның телен «атай» тип астырҙым, артымдан һис ҡалмай», тип тә өҫтәгән.

* * *

Ҡыҙыл Армия яҡынлаша башлағас, Каплун отрядына дошман тылында тәрән разведка үткәрергә бойороҡ килде. Отряд, ваҡ төркөмдәргә бүленеп, Варшаваны ситләтеп үтте лә Германия сигенә барып етте. Дошман менән туранан-тура һуғышырға ҡәтғи тыйылғанлыҡтан, төркөм мөмкин булған урындарҙа ғына рельс һуғышын дауам итеп йөрөнө. Сәйфулла хеҙмәт иткән төркөм алты эшелонды шартлатты. Бер урында йөҙ метр самаһындағы рельсты һүтеп, урман төпкөлөнә һөйрәтеп ташланы. Майор Гора* етәкселек иткән был төркөмдөң дә уңыштары юғары баһаланды.

Көҙ яҡынлашты. Немец һәм поляк ауылдары бер-береһенә терәлеп тигәндәй ултыра. Һаҡ булырға, һәр аҙымды үлсәп атларға кәрәк. Икмәк тотоп, «әйҙүк» тип тороусы юҡ. Киреһенсә, һәр немец мылтыҡ менән ҡаршы алырға әҙер. Был тирәлә лә партизан отрядтары бар. Берәүҙәре совет яҡлы, икенселәре һуғыш башында Лондонға ҡасҡан премьер Бенеш хөкүмәтенә буйһона. Партизандар бер-береһенә дошман. Ҡайһы отрядҡа барып сығыуыңды белмәй, тоҙаҡҡа эләгеүең бик ихтимал. Ҡыҙыл Армияның килеүен көтөп йәшәгән поляк партизандары отряды ҙур ғына. Ул Сәйфулла төркөмөн ихлас ҡабул итте. Шул көндә: «Бынан алыҫ түгел бер ҡасабала немецтарға эшләүсе бәләкәй генә завод бар», тигән хәбәр ишетте Сәйфулла. Унда совет әсирҙәре эшләй. Ҡарауылда — немецтар.

Сәйфулла майор Гораға йүгерҙе. Поляк партизандары командиры ла майор Гораға килгән икән. Икәүләшеп заводта эшләгән легионерҙар тураһында һөйләшәләр.

— Хат яҙып ҡарайыҡ. Совет кешеләре бит әле. Моғайын, намыҫтарын фашистарға һатып бөтөрмәгәндәрҙер. Ватан алдындағы ғәйептәрен ҡан менән юйырға теләүселәр ҙә табылыр. Мөмкинлек бирәйек, — тип һүҙгә ҡыҫылды Сәйфулла.

— Идея, — ти майор Гора, Сәйфулланың фекерен хуплап.

— Тик хатты үҙ телегеҙҙә үҙең яҙаһың. Беҙгә тәржемә итеп ишеттерәһең.

Сәйфулла шунда уҡ күкрәгендә ҡайнаған һүҙҙәрен ҡағыҙ битенә төшөрөргә ултырҙы.

Хат рәсми төҫтә булып, талапсан тел менән яҙылырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта ул аҙашҡан, юлдан яҙған кешеләрҙең күҙен асырлыҡ хәҡиҡәт менән дә һуғарылған булһын.

Гораға ла, поляктар командирына ла хат бик оҡшаны. Уны поляктарҙың элемтәсе разведчиктары аша легионерҙарға еткерҙеләр. Легионерҙарҙан икенсе көндө, хатта егерме дүрт сәғәтте лә көтмәй, русса яҙылған яуап килде. Риза!

Легионерҙар, поляк партизандары менән берлектә немецтарҙың күбеһен тотоп, ҡалғандарын ҡырып, бөтә ҡоралдары менән Гора отрядына килеп ҡушылды. Былар көслөк менән тупланған һәм «829-сы Иҙел-татар батальоны» тип йөрөтөлгән әсирҙәр икән.

Легионерҙар араһында Сәйфулланың ауылдашы, Яңғыҙҡайын егете Ғәбделғәни Вәлишин да бар ине. Ул Сәйфулланы күргәс, илап, ҡосаҡлап алды. Улар йәштәш булмаһа ла, бергә уйнап үҫте. Седлице лагерында osрашҡайнылар. Ғәбделғәниҙе килгән көнөндә үк бер төркөм әсирҙәр менән ҡайҙалыр алып киттеләр. Хәҙер инде икеһе ике кейемдә, ике төрлө автомат менән ҡоралланған хәлдә осрашты. Дошмандармы? Түгел. Теләктәр бер: фашистарҙан үс алыу. Һуғыштың, әсирлектең нимә икәнен күп татыған Ғәбделғәниҙең нәфрәте ҡайнағайны. Характеры йомшаҡ булыу арҡаһында ғына дошман пропагандаһына ышанып йөрөгән. Йәнәһе, илдә уны дар ағасы көтә.

---

*Майор Гора — ысын фамилияһы Глумов.

Аэродромдарҙың, хәрби келәттәрҙең совет самолеттары тарафынан бомбаға тотолоуында партизандарҙың өлөшө ҙур булыуын фашистар, әлбиттә, белә. Легионерҙарҙың партизандарға ҡушылыуы иһә уларҙы тағы ла шаштырҙы.

Отряд Шпрее йылғаһы буйында бер бәләкәй генә урманда туҡталғайны. Фашистар партизандарҙы еңел тапты. Бер самолет бомба ырғыта, икенсеһе пулеметтан һиптереп үтә. Ул арала дошман ғәскәре урманды ҡамап алды. Алдан иҫерек власовсылар килә.

Алыш ҡаты булды. Карателдәр урман эсенә үтә алманы. Отряд төндә дошман ҡулсаһын йырып сығып юл яҙҙырҙы.

Гитлерсылар алышта ике йөҙҙән ашыу, ә отряд ҡырҡ кешеһен юғалтты. Уларҙың күбеһе кисә генә отрядҡа килеп ҡушылған легионерҙар ине. Иртәгеһенә разведка яһаған иптәштәре Мәжитовҡа Ғәбделғәнизең ҡайышын алып ҡайтып бирҙе.

— Яҡшы дуҫ ине. Ятҡан урыны йомшаҡ, тупрағы еңел булһын. — тине ауыр көрһөнөп, ауылдашының ҡайышын тотоп ҡайтҡан Динәхмәт Әҙелгәрәев.

* * *

Ҡыҙыл Армияның регуляр частары килеп еткәс, партизандар уларға ҡушылды. Фронтта күрһәткән батырлыҡтары өсөн икенсе дәрәжә Ватан һуғышы һәм өсөнсө дәрәжә Дан ордендары менән бүләкләнде Сәйфулла. Еңеү көнөн госпиталдә ҡаршыланы. Тороп йөрөй алмай һыҙланып ятһа ла, сикһеҙ бәхет тулҡынында йөҙә ине ул. Көн аяҙ, йылы. Госпиталдәге һалдаттар шаугөр килә. Ҡотлашалар, илайҙар. Сәйфулланың да күҙенә йәш эркелде. Мең ғазаптар эсендә дүрт йыл ғүмере үтте бит. Уларҙы нисек онотаһың? Был бәхетле мәлде яулап алыр көн дә бар икән! Дөмөктө фашизм! Мәңгегә дөмөктө. Үҙ өңөндә үҙ ҡанына тонсоҡто.

Кискә табан ишек төбөндә таныш тауыш ишетелгәндәй булды.

— Вам кого, товарищ старший лейтенант? — тигән һорауға ул тауыш:

— Мне Сайфуллу Мазитова, — тине.

Был Алимдың тауышы ине.

— Я здесь! — тип ҡысҡырып ебәргәнен Сәйфулла һиҙмәй ҙә ҡалды.

Алим килеп уның эргәһенә ултырҙы. Ҡулъяулығын сығарып, башта Сәйфулланың, унан үҙенең күҙ йәштәрен һөрттө. Хистәренә сумып, байтаҡ ваҡыт һөйләшә алманылар.

— Хәлең нисек, дуҫ? Яраң бик ауыр түгелме? — тине Алим.

— Түҙерлек. Былай булғас, иртәгә үк тороп китермен әле.

Ваҡыттың үтеүенә ҡарамай оҙаҡ һөйләште дуҫтар. Сәйфулланы ташлап сығып китергә көсө етмәй ине Алимдың. Аҙыраҡ тынyслана биргәс, һуңғы көндәрҙәге хәлдәрҙе һөйләп алды. Совет ғәскәрҙәре Эльбала американдар менән осрашҡан. Германияның бер ниндәй шарт ҡуймай һис һүҙһеҙ капитуляция яһауы тураһында актҡа ҡул ҡуйылған. Алим Яков Милькомонов тураһында ла яҡшы хәбәр килтергән. Ул Берлинды алған дивизияларҙың береһендә хеҙмәт итә, званиеһы — подполковник. Ордендар менән бүләкләнгән. Әммә Алимдың Ибраев тураһында ғына мәғлүмәте юҡ. Ошоларҙы хәбәр иткәс, Алим:

— Ә беләһеңме, ауылдашың Сабит Ҡунафин Америкаға киткән бит. Сталинградта үлеп ҡалған немец генералының ҡыҙына өйләнгән. Бына шундай яңылыҡ, — тип ҡуйҙы.

Еңеү көнөнән һуң Сәйфулланы эҙләп бик күп иптәштәре килде. Шулар араһында Әлшәй районы Ташлы ауылы егете Динәхмәт Әҙелгәрәев тә бар ине.

* * *

Мәскәү поезы, алыҫ юлға сығырға әҙерләнеп, ухылдап көс йыя. Вагондар совет һалдаттары менән тулы. Уны оҙатырға тип табиптар, шәфҡәт туташтары ғына түгел, ҡайһы бер яралылар ҙа вокзалға төшкән. Һәр кемдең ҡулында сәскә бәйләме.

Оҙатыусылар, ҡосаҡлашып һаубуллашҡас, Сәйфулла ҡуҙғалырға торған поезд вагоны тамбурына күтәрелде. Паровоз вагондарын әкрен генә һөйрәп көнсығышҡа табан ҡуҙғалды.